*Марсель СӘЛИМОВ*

# ТЕЛ ТИРМӘҺЕ ТАРТЫУСЫЛАР

*(Сатирик хикәйә)*



Эштән ҡайтып, диванға баш терәүем булды, ҡатын мыжырға тотондо:

— Ошо ла булдымы тормош! Минең кеүек бәхетһеҙ кеше юҡтыр донъяла. Ни, исмаһам, ирҙән уңманым...

Бүтәненә түҙер ҙә инем, бисәнең һуңғы һүҙҙәре күңелгә ныҡ төртөлдө.

— Ниңә мине игәйһең? — тинем үпкәләп. — Гүләйт итеп йөрөмәйем бит. Арып-алйып эштән ҡайттым.

— Һинең арып-алйып эшләүеңдән ни файҙа!

— Нисек инде «ни файҙа»?! Ә хеҙмәт хаҡы? Тиненә тиклем ҡайтарып бирәм.

— Һи! — тине бисә иҫе китмәй генә. — Һинең айлыҡ эш хаҡыңды коммерсант Көрәйев бер көндә күрәп ала.

Унының үҙем дә беләм, тик бисә алдында тубыҡланғы килмәй.

— Унының ҡарауы, — тим, — коммерсант Көрәйевҡа квартал һайын премия тәтемәй.

— Төкөрҙө ул һинең премияңа. Шул да булдымы табыш!

— Туҡтале, бисә... Һин нәмә, минең хеҙмәт хаҡынан ҡәнәғәт түгелһеңме?

— Хеҙмәт хаҡыңдан да, үҙеңдән дә! — тине бисә, эре сирттереп. — Ҡайтаһың да һуҙылып ятаһың.

— Һуң, нимә эшләйем тағы?

Бисә оторо ҡыҙҙы:

— Йә, хоҙайым! Шул тиклем дә булдыҡһыҙ ир булыр икән. «Нимә эшләйем», имеш! Һуң бит әле бер эшең дә эшләнмәгән. Ни квартирабыҙ юҡ, ни машинабыҙ юҡ. Исмаһам, баҡса ла алмайһың. Кеше кеүек дача ҡойоп ҡуйыр инең. Белмәйем, нисек йәшәргә уйлайһыңдыр. Яңы экономик шарттарҙа...

— Уф, надайыл! «Экономика» ла «экономика» тип башты ҡатырҙың бит әй!

— Экономиканы яратмаһаң, политика менән шөғөлләнә! — тине ҡатын ҡаты ғына. — Ана, кеше ирҙәре шулай итә. Бывший алкаш Ҡыйышбайға тиклем, яңы партия төҙөйөм тип йөрөй.

— Ха-ха-ха! Уға нимәгә партия?

— Власты ҡулыма алам, ти.

— Шунан нимә эшләй?

— Власть башына үҙе менеп ултыра ла үҙенә элитный йорттан квартир ала, өҫтәүенә өс ҡатлы кәттидж һалдырта. Ә һин, политиканан артта ҡалған нәмәкәй, ғүмер буйы фатирһыҙ интегерһең әле!

Ҡатын, бәләкәй генә бүлмәбеҙҙе иңләп-буйлап, ишекле-түрле йөрөнө. Сөбөханалла, күҙ теймәһен, хоҙай тәғәлә кәүҙәне йәлләмәгән үҙенә. Ул түргә атлаһа, мин ишеккә үтә алмайым. Шуға күрә ҡатын өйҙә йөрөгәндә, ҡыҫылып ҡалмаҫ өсөн, шифоньер башына менеп ултырам.

— Шул тиклем дә политиканан артта ҡалырһың икән! — тине ул, һаман мине әрләп. — Һуң, үҙең самалап ҡара. Башың булһа аҙыраҡ...



05-2001.p65 114 27.07.01, 12:16

Бер уйлаһаң, ҡатында ла хаҡлыҡ бар һымаҡ. Ҡара һин уны, бисә тиһәң дә, сәйәси һиҙгерлеге бар үҙенең.

Килде бит заманалар! Ҡатын менән иҡтисад һәм сәйәсәт хаҡында ғына һөйләшәбеҙ. Сексуаль мәсьәләләрең иттә торһон!

Нимә генә тиһәң дә, бисә менән «дискуссия»нан һуң башымда төрлө уйҙар ҡайнаша башланы. Бығаса мин политикаға битараф кеше инем. Ҡапыл күңелем төбөнән сәйәси сәм ҡалҡып сыҡты.

Демократия шарттарында кешеләрҙең политик аңы уяна, тигәндәре әллә шулай буламы икән?

Һәр хәлдә ҡатын менән кәңәшләшеп ҡарарға кәрәк.

— Әллә берәй партияға инеп, карьера яһайыммы икән? — тинем уға. — Тик ниндәйенә? Күп бит улар хәҙер...

Бисәнең бөтә осраҡта ла кәңәше әҙер.

— Һайлап тораһы бармы! — тине ул, уйлап та тормай. — Уларҙың бөтәһе лә бер ҡалыптан. Хөкүмәтте тәнҡитләүҙән башҡа эш күрһәткәндәре юҡ әлегә.

— Шулай инде, кемдер эшләй, кемдер тәнҡитләй. Бына мин, ғүмерем буйы эштән бушамағас, башҡаларҙы тәнҡитләргә ваҡытым да ҡалмай.

— Эшләп нимә ҡырҙың?

— Ҡырманым — төҙөнөм! Нық үҫешкән социализм, хатта коммунизм!

Ҡатын шарҡылдап көлдө.

— Бигерәк бер ҡатлыһың, — тине. — Һин төҙөгән коммунизм түрәләр өсөн генә булды бит.

— Шуға күрә хәҙер коммунизмды капитализмға үҙгәртеп ҡороу бара.

— Ҡараҡтар, жуликтар файҙаһынамы?

— Һин, бисәкәй, әллә нәмә һөйләп, күңелгә шом һалып ултырма. Йәме. тинем ахырҙа. — Политика — ул етди нәмә. Һинең кеүек дилетанттар өсөн түгел. Миңә сәйәси өлгөргән, компетентлы кешеләр менән эш итергә кәрәк.

Шулай тинем дә ҡала хакимиәтенә йүнәлдем. Ҙур бинаның иң ҙур бүлмәһенә инеп:

— Мин яңы партия төҙөү мәсьәләһе менән килдем, — тинем.

Иң ҙур бүлмәләге ҙур өҫтәл артында ултырған иптәш көрһөнөп ҡуйҙы:

— Тағы ла яңы партия! Ә мин бында ауылға ярҙамға ебәрергә кеше таба алмай ыҙаланам. Ҡыҙыу ураҡ өҫтө бит хәҙер. Ғүмерҙә булмағанса, иген ҡотороп уңған, белһәң...

— Белмәйем.

— Белмәйһең шул, — тине теге үпкәләгән ҡиәфәттә. — Бер кем дә белергә теләмәй баҫыуҙағы хәлде. Бөтәһенә лә политика ене ҡағылған. Берәүҙең дә эштә ҡайғыһы юҡ. Йә, ярай, ғәфү итегеҙ, яңылыш ҡыҙып киттем. — Ул бер аҙ һүрелә төштө. — Тимәк, партияғыҙҙы регистрацияларға теләйһегеҙ инде, ә? Ҡана, тейешле ҡултамғалар бармы? Партияғыҙҙа нисә кеше?

— Мин үҙем.

— Ә-ә, лидер, тимәк. Программа, уставығыҙ бармы?

— Юҡ.

— Һуң, улайһа... — Ул миңә һынаулы ҡараш ташланы. — Кем тип әйтәйем үҙегеҙҙе: «иптәш» типме, әллә «әфәнде»ме?

— Нисек тә ярай.

— Ул осраҡта эш былай тора, иптәш гражданин әфәнде. Тәүҙә һеҙгә партияғыҙҙың уставын һәм программаһын әҙерләргә кәрәк.

— Әҙерләй белмәйем бит әле. Сөнки әлегәсә тик әҙер программаларҙы ғына тормошҡа ашырҙым.

— Ғәйеп түгел, — тине теге, миһырбанлы йылмайып. — Әлек бөтәһе лә шулай итә ине. Хәҙер бөтәһе лә программа төҙөү менән мәшғүл. Программаларҙы үтәүгә ҡарағанда төҙөүе рәхәтерәк.

— Әлләсе... Рәхәте тойолмайсы...

— Һинең кеүек йәш политиктарҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн беҙ махсус ижтимағи-сәйәси кооператив асып ебәрҙек. Халыҡҡа яңы партиялар төҙөү хеҙмәтен күрһәтә ул.

Ғәҙәти булмаған кооперативтың адресын алып, шунда киттем.

— Бик ваҡытлы килгәнһегеҙ, — тип, йылмайып ҡаршы алды мине хуш күңелле әфәнде. — Хәҙерге заманда политик партиялар кешеләргә һыу менән һауа шикелле кәрәк. Шуға һәр кем үҙенә йәтеш ойошма төҙөп ҡалырға тырыша. Әйткәндәй, был эштә бигерәк тә элекке коммунистар әүҙемлек күрһәтә. КПСС-ты тарҡатҡас, әле бер партия, әле икенсеһен төҙөп, шуларҙы етәкләргә ашҡыналар.

— Ә һеҙҙең хәлдәр нисек һуң? — тип һораштым унан. — Эшһеҙлектән интекмәйһегеҙҙер бит?

— Ҡайҙа ул! Көн һайын тиҫтәләгән партияға тиҫтәләрсә төрлө программа төҙөп бирәм. Ниндәйҙәре генә юҡ уларҙың: демократик, антидемократик, социал-демократик, анархистик,



05-2001.p65 115 27.07.01, 12:16

монархистик... Беҙҙең кооператив-тың маҡсаты — киләһе йылға ҡалабыҙҙағы һәр кешене айырым партия менән тәьмин итеү! Ваҡыт аҙ ҡалды. Йә, тиҙерәк йомошондо әйт тә — эшкә тотонайыҡ. Партиягыҙҙың исеме ниндәй? Алдан уҡ әйтеп ҡуям: Көнбайыштағы һәм революцияға ҡәҙәре үҙебеҙҙәге партияларҙың исемдәрен алмаҫҡа — уларҙы бүлешеп бөттөләр. «Халыҡсан», «демократик», «радикаль» һүҙҙәре ингән партиялар ҙа быуа быуырлыҡ.

— Ниндәй исем һайларға һуң улайһа?

— Был минең вазифама кермәй. Уныһы — һеҙҙең эшегеҙ. Партиягыҙҙың исеменә ҡарап, программа төҙөп бирермен.

Мәсьәләнең былай ҡуйылыуы мине ҡәнәғәтләндермәне.

— Шулай инде ул, кооперативҡа көнөң ҡалһа... — тип, ҡул һелтәп китергә лә иткәйнем, теге кеше юлыма арҡыры төштө.

— Туҡтағыҙ, — тине. — Бер яҡлы ғына һығымта яһамағыҙ. Ике яҡтың да талаптарын иҫәпкә алып, консенсусҡа өлгәшәйек.

Һәм ул миңә, сәйәси тәжрибә туплау өсөн, төрлө партияларҙың съездарында булырға кәңәш итте.

Ҡалала политик атмосфераның яман ҡыҙған мәле ине. Ҡайҙа ҡарама — съезд йәки конференция, һис юғында, пленум бара. Бөркөү залдарҙа делегаттар, тирләп-бешеп, халыҡҡа хеҙмәт итеүҙең альтернатив юлдарын асыҡлайҙар, илде көрсөктән сығарыу мәсьәләләрен тикшерәләр. Бөтә ерҙә лә демократияның сәскә атҡан сағы.

Бер партия съезында, мәҫәлән, державаның ҡеүәтен нығытыуҙа баҙар экономикаһы йәтешме, әллә экономика баҙары шәберәкме, тип ҡыҙыпҡыҙып бәхәсләшәләр.

Икенсе партия съезында нисек взнос йыйыу мәсьәләһен хәл итәләр. Был хаҡта фекер алышҡанда ике платформа барлыҡҡа килгән: патриотик һәм интернационалистик. «Патриоттар» ағзалыҡ взносын үҙебеҙҙең һумдар менән алырға кәрәк тип ныҡыша, ә «интернационалистар» конверсияланган валютала түләүҙе хуп күрә.

Өсөнсө бер партия съезында милләт-ара мәсьәләләр ҡарала ине. Делегаттар милли республикаларҙың ғына түгел, айырым милләттәр йәшәгән ҡала һәм ауылдарҙың да суверенлыҡ хоҡуғын талап итәләр.

Төрлө партия съездарында яңғыраган һүҙҙәргә ҡолаҡ һалып йөрөнөм дә ахырҙа аныҡ бер фекергә килдем. Юҡ, мин уны сәйәси кооператив әһеленә әйтеп әрәм итмәнем. Туп-тура ҡала хакимиәтенә йүгерҙем. Иң ҙур бүлмәләге ҙур өҫтәл артында ултырған иптәштең үҙенә ярып һалдым:

— Ниһәйәт, мин төплө политик фекер тупланым!

Теге башын күтәреп ҡараны ла:

— Ә-ә, яңы партия мәсьәләһе... — тине. — Йә, ниндәй партия төҙөргә булдығыҙ?

— Мин илебеҙҙең бөтә ауырлығын «ыһ» та итмәй үҙ елкәһендә күтәреүсе күп һанлы партияһыҙҙар партияһы сафында ҡалам! — тинем ғорур ғына. — Ауылға ярҙамға барырға шефтар кәрәкһә, мин һәр ваҡыт әҙер!

Иптәш кеше, ышаныргамы, юҡмы тигәндәй, миңә текләне. Ахырҙа, ҡулымды ҡыҫып:

— Молодец! — тине. — Һин бөгөнгө политиканан артта ҡалмаған, ә алға киткән кеше!

Бына шулай әле ауылда эшләп йөрөйөм. Урақта. Тирләп-бешеп съездарҙа ултырып, «үҙгәртеп ҡорабыҙ» тип, үҙгәртеп ҡырыусы сәйәсмәндәр өсөн дә икмәк әҙерләйем. Тел тирмәне тартып ҡына тамаҡтары туймаҫ бит уларҙың.

Әйткәндәй, колхозда эшләүемдән ҡатыным бик ҡәнәғәт. Хеҙмәт хаҡына ауылдан бер йөк аҙыҡ-түлек тейәп ҡайтҡас, әйтте бит был миңә:

— Политиканан әллә ни алға китмәһәң дә, экономиканан артта ҡалмайбыҙ, былай булғас.

Миңә, эш кешеһенә, күп кәрәкме?! Бисәнең маҡтау һүҙен ишетһәм, орден алғандай булам. Эйе, эйе, тап шулай! Һис арттырып әйтмәйем.

Ғөмүмән, мин арттырғанды-шыттырғанды яратмайым. Ятһа ла уны шул «үҙгәртеп ҡырыусылар» ғына яраталыр. Хәйер, уларҙа эшем юҡ. Теләһә нисек шыттырһындар, эшләргә генә ҡамасауламаһындар!

Еңгәгеҙ илебеҙ хаҡында йыр ҙа сығарған:

Сәйәсмәндәр лыбыр-лыбыр
Һөйләй ҙә һөйләй гелән.
Тел тирмәне тартып ҡына
Келәт тулмай он менән!



05-2001.p65 116 27.07.01, 12:16